## Дәрестең технологик картаһы

| | |
|---|---|
| **Дәрес темаһы:** | **Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина “Рәйфә мәктәпкә бара”.**<br>**Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар.** |
| **Дәрес төрө:** | Яңы материалды өйрәнеү. |
| **Дәрес маҡсаттары:** | **Белем биреү:** Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның тормошо һәм ижады менән таныштырыу, “Рәйфә мәктәпкә бара”шиғырын өйрәнеү.Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙың әйтелешен, яҙылышын ҡабатлау;<br><br>**Үҫтереүсе:** Бәйләнешле телмәрҙәрен үҫтереү; яңы һүҙбәйләнештәр аша һүҙлек запастарын тәрәнәйтеү;<br><br>**Тәрбиәүи:** Атай-әсәйгә, туғандарға иғтибарлы, хәстәрлекле булырға өйрәтеү. |
| **Планлашты-рылған һөҙөмтәләр** | **Предмет:** Ф.Ғөбәйҙуллинаның шиғырын өйрәнеү,<br>телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу,<br>тасуири уҡыу күнекмәһен үҫтереү, уҡыу техникаһын камиллаштырыу.<br><br>**Метапредмет:** дәрестә ҡуйылған маҡсатты аңлау, уны тормошҡа ашырырға тырышыу, кәрәкле мәғлүмәтте таба белеү, үҙ эшеңде, парыңдың эшен тикшерә алыу, яңы һүҙбәйләнештәрҙе, үтелгән материалды тормош менән бәйләй белеү, һорауҙарға яуап биреү.<br><br>**Шәхсән:**Ижади һәләттәрен үҫтереү, үҙ фекереңде булдырыу,ололарға иғтибарлы,яуаплы,әҙәпле шәхес тәрбиәләү.<br><br>**Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:**<br>**Регулятив**: дәрестең маҡсатын үҙ аллы билдәләү, үҙеңдең эшмәкәрлегеңде планлаштырыу, баһалау;<br>**Танып белеү**: кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп табыу, проблеманы хәл итеү;<br>**Коммуникатив**: класташтарҙы тыңлау, аңлау,үҙ фекереңде теүәл тапшырыу; |
| **Предмет-ара бәйләнештәр** | Башҡорт теле, тәбиғәтте өйрәнеү. |
| **Йыһазландырыу** | “Башҡорт теле” дәреслеге, компьютер, мультимедиа проекторы, презентация, һүҙлектәр, ребустар менән карточкалар. |
| **Дәрес формаһы** | Ф- фронталь, И – индивидуаль, П – парҙа, Т-төркөмдә |
| | |

| Дәрес этабы | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге | Уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|
| **Ойоштороу моменты** | Уҡыусыларҙы сәләмләй, дәрескә әҙерлек кимәлдәрен күҙаллай. | Уҡыусылар уҡыу кәрәк-яраҡтарын тәртипкә килтерәләр, уҡытыусыны | Регулятив: эш урынын тәртипкә килтереү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу** | Артикуляцион күнегеү.<br>**(Слайд 1)**<br>Бүлмә тып-тын,<br>Дәрес бара.<br>Яңы тема бик ҡыҙыҡ,<br>Уҡытыусы һөйләгәнде<br>Беҙ тыңлайбыҙ йотлоғоп.<br>(М.Дилмөхәмәтов) | сәләмләйҙәр, эш процесына әүҙем ҡушылалар.<br><br>Уҡыусылар хор менән ҡабатлайҙар. | Коммуникатив: уҡыусының үҙ-үҙен уҡытыусы һәм класташтары менән берлектә хеҙмәттәшлеккә көйләү.<br>Танып-белеү: Яңы белем алыу кәрәклеген аңлау. |
| **Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу** | **(Слайд 2)**<br>-Уҡыусылар, был һүрәттә йылдың ниндәй миҙгеле төшөрөлгән?<br>-Балалар ҡайҙа ашығалар?<br>-Ни өсөн уларҙың ҡулдарында гөлләмәләр?<br>-Тимәк, бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?<br><br>-Эйе, уҡыусылар мәктәпкә,белем байрамына ашығалар.<br>-Бөгөн дәрестә уҡыусылар өсөн ниндәй мөһим ваҡиға тураһында һөйләшербеҙ? | Уҡыусылар һорауҙарға яуап бирәләр. Дәрестең темаһын билдәләйҙәр.<br><br>Дәрестә нимәләр тураһында һөйләшәсәктәрен әйтәләр. | Регулятив: Уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләргә өйрәнәләр.<br>Коммуникатив: Класташтарҙы тыңлау, үҙ фекреңде әйтеү.<br>Танып-белеү: теманы билдәләү |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Яңы теманы өйрәнеү, Уҡыу мәсьәләһен сисеү.** | - Бөгөн беҙ Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре Ф.Ғөбәйҙуллинаның “Рәйфә мәктәпкә бара”шиғырын уҡырбыҙ, анализларбыҙ. Уның тормош юлына һәм ижадына байҡау яһарбыҙ.<br>**(Слайд 3-5)**<br>Ф.Ғөбәйҙуллинаның тормошо һәм ижады менән таныштырыу.<br><br>Уҡытыусы шиғырҙы тасуири уҡый.<br>-Уҡыусылар , Һеҙгә шиғырҙа аңлашылмаған һүҙҙәр осранымы?<br><br>-Рәйфә мәктәпкә барған көндө һауа торошо ниндәй булған?<br>-Ул нисәнсе класҡа бара?<br>-Өләсәһе Рәйфәгә ниндәй теләк теләй?<br>**Төркөмдә эш.**<br>-Үҙегеҙҙең Белем байрамы тураһында һөйләгеҙ ?<br>- Беренсе уҡытыусығыҙ кем? | Уҡыусылар эш дәфтәрҙәренә датаны, аҙна көнөн, теманы яҙалар.<br><br>Уҡытыусыны тыңлайҙар.<br><br>Уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы.<br>Һүҙлек эше.<br>Уҡыусыларҙың шиғырҙы сылбырлы уҡыуы (тәржемә менән)<br><br>Уҡытыусының һорауҙарына яуап бирәләр.<br><br>Уҡыусыларҙың яуаптары. | <u>Регулятив:</u> Ишеткәнде тәртипкә килтереү, систе-малаштырыу.<br><br><u>Коммуникатив:</u> яңы һүҙҙәрҙе телмәрҙә дөрөҫ ҡулланып һөйләргә өйрәнеү.<br><br><u>Танып белеү:</u> телмәрҙе яңы һүҙҙәр менән байытыу, һөйләмдәр төҙөү аша һөйләү ҡеүәһен үҫтереү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Ял минуты** | **(Слайд 6)**<br>Ял минуты бик кәрәк<br>Дәрестең уртаһында.<br>Төрлө хәрәкәт яһау<br>Арыуҙы оноттора. | Уҡытыусы артынан хор менән ҡабатлайҙар. | уйында ҡатнашыу, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу арта. |
| **Белемде нығытыу.** | **(Слайд 7)**<br>1.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау.<br>Мәктәп, тәнәфес, өҫтәл, дәфтәр, көндәлек, дәреслек, уҡытыусы, ҡыңғырау.<br>2.Һүҙбәйләнештәр төҙөү.<br><br>**(Слайд 8)**<br>3. Йыл миҙгелдәрен ҡабатлау. Ребустар сисеү. | Эш дәфтәренә һүҙҙәрҙе яҙалар.<br>Уҡытыусы артынан яңы һүҙҙәрҙе хор менән ҡабатлайҙар.<br><br>Өлгө буйынса һүҙбәйләнештәр төҙөйҙәр.<br><br>Йыл миҙгелдәрен ҡабатлайҙар. Парлап эшләйҙәр, ребустар сисәләр. | <u>Регулятив:</u><br>Уҡыу мәсьәләһен аңлау, практик ҡулланыу.<br><u>Коммуникатив:</u><br>Башҡаларҙы тыңларға, үҙеңдең фекереңде әйтеү.<br><u>Танып белеү:</u><br>телмәрҙе яңы һүҙҙәр менән байытыу, һүҙбәйләнештәр төҙөү аша һөйләү ҡеүәһен үҫтереү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Рефлексия.Баһалау.** | -Бөгөнгө дәрестә нимәләр белдегеҙ?<br>- Нимәгә өйрәндегеҙ?<br>- Һеҙгә дәрес оҡшанымы?<br>- Үҙегеҙгә ниндәй баһа ҡуйыр инегеҙ?<br>Үҙбаһа, уҡытыусының баһаһы. | Уҡыусылар дәрес башында ҡуйылған маҡсатты иҫкә төшөрөп, дәрес аҙағында өлгәшелгәндәрҙе байҡайҙар, һығымталар яһайҙар.<br>Белем кимәлдәрен баһалайҙар. | Регулятив:<br>дәрестә үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү, анализлау, һығымталар яһай белеү.<br>Коммуникатив:<br>Башҡаларҙы тыңларға, үҙеңдең фекереңде әйтеү.<br>Танып белеү:<br>фекерләү ҡеүәһен үҫтереү. |
| **Өйгә эш.** | 1.Шиғырҙы  тасуири уҡырға.<br>2. 15-се күнегеү, һүҙҙәрҙе йыл миҙгелдәренә төркөмләп яҙырға.<br>3. “Белем көнө” темаһына һүрәт төшөрөргә. | Уҡыусылар өй эшен көндәлеккә яҙып ҡуялар. | |